## Сибай ҡалаһының мәғариф ойошмалары

Башҡорт теленән региональ диктантты ойоштороусылар:

Сибай ҡалаһы мәғариф бүлеге (методисы **Айһылыу Моталлапова** )

Бөтә республикала иғлан ителгән башҡорт телендә диктант яҙыу акцияһына Сибай ҡалаһы мәғариф ойошмалары ла әүҙем ҡушылды. 11 апрелдә Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейында мәктәптәр һәм балалар баҡсалары вәкилдәре өсөн диктант яҙыу ойошторолдо. Сарала бөтәһе 107 кеше ҡатнашты. Улар араһында мәктәп уҡыусылары, уҡытыусылары, тәрбиәселәр, ата-әсәләр, мәғариф ветерандары булды. Айырып әйткәндә, диктант яҙыуҙа 1 мәктәп директоры, 1 балалар баҡсаһы мөдире, 14 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, 29 башланғыс кластар уҡытыусылары, 32 балалар баҡсалары тәрбиәселәре һәм хеҙмәткәрҙәре, 28 уҡыусы һәм башҡалар ҡатнашты.

Иң кескәй ҡатнашыусылар 1-се мәктәптең 5-се класс уҡыусылары булһа, иң оло ҡатнашыусы 75 йәштә булып сыҡты. Ҡайһы бер мәктәп уҡыусылары һәм уҡытыусылары Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында диктант яҙҙы.

Диктант тексы күләме яғынан ҙур ғына булды. Был акцияла ҡатнашҡан мәктәп уҡыусылары өсөн ауырыраҡҡа тура килде. Дөйөм алғанда, 19 кеше – “5”-кә, 40 ҡатнашыусы – “4”-кә, 27 кеше “3”-кә яҙҙы, ҡалған эштәр насар баһа алды.

Диктант тексын 6-сы мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Баййегетова Лилиә Хабрахман ҡыҙы, 12-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы Ҡыҙрасова Әминә Зиннәт ҡыҙы, мәғариф ветераны, Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы Ғәйнуллина Таңһылыу Фәтих ҡыҙы, 12-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Лоҡманова Гүзәл Марат ҡыҙы уҡыны. Шул уҡ белгестәр эштәрҙе тикшереп сыҡты һәм баһаланы.

Шулай уҡ был сараны ойоштороуҙа Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейы коллективы һәм уның директоры Ноғоманов Иштуған Рәйес улы ҙур өлөш индерҙе.

Ғөмүмән, диктант яҙыуҙы ойоштороу ҙур әһәмиәткә эйә, тип уйлайбыҙ. Милләттәштәребеҙҙе бергә туплаусы, рухландырыусы, туған телгә ылыҡтырыусы бер сара ул. Һәр кем ниндәйҙер кимәлдә рухи күтәрелеш кисерҙе, тип әйтергә лә була. Ҡайһы бер уҡытыусылар үҙҙәренең мәктәптәрендә лә шундайыраҡ саралар үткәрергә теләк белдерҙеләр.

Республика кимәлендә ҙур һәм мәртәбәле сараны ойоштороусыларға рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе еткерәбеҙ.